ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

Мөхйиддин бин Ғәрәби

“Сәжәрәтүль-Каун” китабынан

Издательская группа САД

1-се баҫма
Москва - 2010

بسم الله الرحمن الرحيم

Мөхйиддин бин Ғәрәби
“Сәжәрәтүль-Каун” китабынан

ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

Гөлнәзирә Айытбаева тәржемәһе
Әҙәби мөхәррире Гөлфиә Янбаева
Дини мөхәррире Айҙар Хәбибуллин

Исповедь сатаны. Перевод с русского языка на башкирский. М.: ООО «Издательская группа «САД», 2010 г. – 52 стр., 1-е издание. Тираж: 5.000 экз.

ISBN 978-5-91811-004-1

Рекомендуется для широкого круга читателей.

Все права защищены.

Книги можно заказать:

Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Офис: г. Москва, м. Петровско-Разумовская, ул. Ангарская, 21
Тел / Факс: 8 (499) 9066717, 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
www.sadpress.com / izdatelstvo-sad@yandex.ru

© ООО «Издательская группа «САД», 2010

Издательская группа САД

SAD GRAPHICS

Тел: 8 (499) 9066717, 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
izdatelstvo-sad@yandex.ru - http://www.sadpress.com

Верстка и обложка: Адем Оздемир

1-се баҫма

ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

Мөхйиддин бин Ғәрәби

“Сәжәрәтүль-Каун” китабынан

Издательская группа САД

Москва - 2010

Күренмәгән дошмандарҙан абай бул

Пәйғәмбәрлектең үре һәм тажы булған Мөхәммәт Пәйғәмбәр *(саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм)* өммәтендә булыу бәхетенә ирештергән Аллаһы Тәғәләгә сикһеҙ мактау булһын!

Аллаһы Тәғәлә кешене был донъяға һынау өсөн ебәргән. Ә һынау өсөн төп сара итеп Ул нығыш, хәйләкәр, кешене оҫта итеп юлдан яҙҙырыусы шайтанды барлыҡҡа килтергән.

Аллаһ Әҙәм Пәйғәмбәрҙе *(ғәләйһиссәләм)* ерҙә үҙенең Илсеһе булараҡ яралтҡан һәм фәрештәләр менән шайтанға: *"Әҙәмгә гибәҙәт ҡылығыҙ!"* тип бойорған. Бар фәрештәләр сәждә ҡылған, тик шайтан ғына үҙенең таккәбберлеге арҡаһында әмергә буйһоноуҙан баш тартҡан.

– *Һин ниңә гибәҙәт ҡылманың?* – тип һораған унан Аллаһ.

– *Мин бит - уттан, ә Әҙәм тупраҡтан яратылған. Ут тупраҡтан яҡшыраҡ,* - тип яуап биргән шайтан.

Аллаһы Тәғәлә фетнәсе, тәккәббер шайтанға асыуланған һәм уны ожмахтан ҡыуған. Ошо ваҡыттан алып шайтан мәңгелеккә Аллаһтың мәрхәмәтенән мәрхүм ителгән. Ергә ҡыуылған шайтан тәүбә итмәгән һәм һуңынан Әҙәм Пәйғәмбәрҙең *(ғәләйһиссәләм)* дошманы булып киткән.

"Кеше минең ожмахтан ҡыуылыуыма сәбәпсе булды. Шуның өсөн мин уны тура юлдан яҙҙырасаҡмын. Мин уға уңдан да, һулдан да, алғы яҡтан да, арҡа яғынан да бәйләнәсәкмен. Мин уны гонаһ эшләргә һәм Аллаһҡа ҡаршылашырға мәжбүр итәсәкмен. Әйҙә Аллаһ уға асыуланһын һәм мине ҡыуған кеүек, уны ла ожмахтан мәхрүм итһен", - тип ант иткән.

Аллаһ уға быны Ҡиәмәт көнөнә тиклем рөхсәт иткән. Шунан алып шайтан Әҙәмдең улдарын яуызлыҡ һәм төрлө хәшәрәтлектәр ҡылырға, хаҡ юлдан баш тартырға ҡоторта. Әммә ул ҡоторта ғына ала. Ҡалғанын кеше үҙе башҡара.

Был аяуһыҙ алыш һәм дошманлыҡ, Аллаһ ихтыяры менән, Ҡиәмәт көнөнә тиклем дауам итәсәк. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе һәм үҙенең Илсеһен шайтандың яман ҡылыҡтары һәм уның хәйләһенә ҡаршы торорға кәрәклеге тураһында иҫкәртә:

يَا أَيُّهَا الَّذِينَ آمَنُواْ ادْخُلُواْ فِي السِّلْمِ كَآفَّةً
وَلاَ تَتَّبِعُواْ خُطُوَاتِ الشَّيْطَانِ إِنَّهُ لَكُمْ عَدُوٌّ مُّبِينٌ

“Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Барығыҙ ҙа Ислам диненә инегеҙ! Шайтан юлынан бармағыҙ! Ул һеҙгә асыҡтан-асыҡ дошман бит!” *(Әл-Бәкара, 208).*

الشَّيْطَانُ يَعِدُكُمُ الْفَقْرَ وَيَأْمُرُكُم بِالْفَحْشَاءِ
وَاللّهُ يَعِدُكُم مَّغْفِرَةً مِّنْهُ وَفَضْلاً وَاللّهُ وَاسِعٌ عَلِيمٌ

“Шайтан һеҙгә фәкирлек вәғәҙә итә, һәм боҙоҡлоҡҡа бойора, ә Аллаһ һеҙгә ярлыҡауын һәм рәхмәтен вәғәҙә итә. Ысынлап та, Аллаһ бар нәмәне биләүсе, белеүсе!” *(Әл-Бәкара, 268).*

كَمَثَلِ الشَّيْطَانِ إِذْ قَالَ لِلْإِنسَانِ اكْفُرْ فَلَمَّا كَفَرَ
قَالَ إِنِّي بَرِيءٌ مِّنكَ إِنِّي أَخَافُ اللَّهَ رَبَّ الْعَالَمِينَ

“(Монафиҡтар) **шайтан шикелле. Бына ул кешегә: “Кафыр бул!” – тине. Ә инде ул кеше иманһыҙ ҡалғас, ул: “Мин һинән ваз кисәм. Ғәләмдар Раббыһы Аллаһтан ҡурҡам”, - тине”** *(Әл-Хәшр, 16).*

Иншаллаһ, был яҙмаларыбыҙҙа беҙ уҡыусыға шайтандың кешегә ҡарата ниндәй тоҙаҡтар

ҡороуы, был күҙгә күренмәгән дошман-дан нисек һаҡланырға һәм уға нисек ҡаршы торорға икәнлеге тураһында әйтербеҙ. Һис һүҙһеҙ, бының өсөн беҙ Изге Ҡөрьәндең һәм Пәйғәмбәребеҙ *(саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм)* сөннәтенең кире ҡаҡҡыһыҙ хәкиҡәтенә мөрәжәғәт итербеҙ.

Был аяуһыҙ көрәштәге беҙҙең дөйөм уңыш Аллаһы Тәғәлә ҡулында. Аллаһы Тәғәләнән беҙҙең ҙур булмаған хеҙмәтебеҙ барыһының да мәнфәғәтенә хеҙмәт итһен тип һорайыҡ.

Йә Аллаһ! Беҙҙе Һинең Яратҡан Илсеңе ***(саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм)*** **сәхәбәләре өммәтенә оҡшаш бер өммәт ит, был хаҡта Һин шулай тинең:**

كُنتُمْ خَيْرَ أُمَّةٍ أُخْرِجَتْ لِلنَّاسِ تَأْمُرُونَ بِالْمَعْرُوفِ
وَتَنْهَوْنَ عَنِ الْمُنكَرِ وَتُؤْمِنُونَ بِاللَّهِ

“Кешеләр алдына сығарылған өммәттәрҙең иң яҡшыһы булдығыҙ: һәм хупланған эшкә ҡуштығыҙ, яраҡһыҙ эштән тыйҙығыҙ, һәм Аллаһҡа иман килтерҙегеҙ” *(Әли Ғимран, 3/110).*

Әмин!

❋

Шайтан – һуғышсан һәм агрессив йән эйәһе:

Кешегә булған көнләшеүе һәм нәфрәте уны кешеләргә ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барырға мәжбүр итә. Ул Аллаһы Тәғәләнән кешенең юлына ҡапҡандар һәм тоҙаҡтар ҡорорға рөхсәт һораған һәм Аллаһтың хикмәте менән уға рөхсәт бирелгән. Шул ваҡыт шайтан ҙур көс һалып һәм һиҙгер аҡылын ҡулланып, кешене хаҡ юлдан сығарыр һәм иманһыҙлыҡҡа төшөрөр өсөн уның артынан туктауһыҙ күҙәтә башлаған:

قَالَ فَاخْرُجْ مِنْهَا فَإِنَّكَ رَجِيمٌ. وَإِنَّ عَلَيْكَ اللَّعْنَةَ
إِلَى يَوْمِ الدِّينِ. قَالَ رَبِّ فَأَنظِرْنِي إِلَى يَوْمِ يُبْعَثُونَ
قَالَ فَإِنَّكَ مِنَ الْمُنظَرِينَ. إِلَى يَومِ الْوَقْتِ الْمَعْلُومِ.
قَالَ رَبِّ بِمَآ أَغْوَيْتَنِي لأُزَيِّنَنَّ لَهُمْ فِي الأَرْضِ
وَلأُغْوِيَنَّهُمْ أَجْمَعِينَ

“Аллаһ бойорҙо: “Кит бынан! Мин һине (ләғнәт ебәреп) **ҡыуам! Хаҡтыр, һин Ҡиәмәт көнөнә саҡлы ләғнәтләнгән килеш ҡалырһың”. “Раббым, - тине Иблис. – Бөтөн кешеләр яңынан терелгәненә саҡлы** (язамды кисектер) **форсат бир миңә”. Аллаһ әйтте: “Ысындан да, һин кисектерелгәндәрҙең**

береһе. Мәғлүм бер ваҡытҡа саҡлы". Иблис әйтте: "Раббым, мине тура юлдан яҙҙырғаныңа күрә, мин дә Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын" *("Әл-Хижр" сүрәһе, 15/34-39)*

❋

Шайтан бик тәккәббер:

وَإِذْ قُلْنَا لِلْمَلاَئِكَةِ اسْجُدُواْ لآدَمَ فَسَجَدُواْ
إِلاَّ إِبْلِيسَ أَبَى وَاسْتَكْبَرَ وَكَانَ مِنَ الْكَافِرِينَ

"Һәм беҙ фәрештәләргә: "Әҙәмде хөрмәтләп сәждә итегеҙ", - тип әйттек. Иблистән башҡа барса фәрештәләр ҙә сәждә итте. Ул (әмеремдән) **йөҙ сөйөрҙө. Тәккәбберлеген еңә алманы,** (тәккәбберлеге арҡаһында) **ул ышанмаусы кафырҙарҙан ине"** *(Әл-Бәкара, 2/34).*

Шайтан фәҡирлек һәм хәйерселек менән ҡурҡыта, гонаһ ҡылыуға этәрә:

الشَّيْطَانُ يَعِدُكُمُ الْفَقْرَ وَيَأْمُرُكُم بِالْفَحْشَاء

"Шайтан һеҙгә фәҡирлек вәғәҙә итә, һәм

боҙоҡлоҡҡа бойора” *(Әл-Бәкара, 2/268).*

Шайтан Бөйөк Аллаһы Тәғәлә тураһында бәхәсләшергә саҡыра:

وَمِنَ النَّاسِ مَن يُجَادِلُ فِي اللَّهِ بِغَيْرِ عِلْمٍ
وَيَتَّبِعُ كُلَّ شَيْطَانٍ مَّرِيدٍ

“Кешеләр араһында наҙан килеш Аллаһ хаҡында бәхәсләшергә әүәҫ кешеләр бар. Улар – аҙғын шайтанға эйәргән кешеләр” *(Әл-Хаж, 22/3).*

Шайтан мосолмандарҙы талаштырырға тырыша:

وَقُل لِّعِبَادِي يَقُولُواْ الَّتِي هِيَ أَحْسَنُ إِنَّ الشَّيْطَانَ
يَنزَغُ بَيْنَهُمْ إِنَّ الشَّيْطَانَ كَانَ لِلإِنْسَانِ عَدُوًّا مُّبِينًا

“Колдарыма әйт, иң татлы һүҙҙәр генә һөйләһендәр. Юғиһә шайтан улар араһында ғауға сығарыусы. Шайтан кешенең иң хәтәр дошманы” *(Әл-Исра, 17/53).*

مِن بَعْدِ أَن نَّزَغَ الشَّيْطَانُ بَيْنِي وَبَيْنَ إِخْوَتِي

“Шайтан минең һәм туғандарым араһында дошманлыҡ ҡылғандан һуң...” *(Йософ, 12/100).*

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу гәләйһи үә сәлләм)*: *“Шайтан Ғәрәп ярымутрауында йәшәгән намаҙ уҡыусылар уның артынан китеренә өмөтөн юғалтҡан. Әммә улар араһында дошманлыҡ тыуҙырыуына өмөтләнә”*, - тип әйткән. *(Мөслим).*

Шайтан малын әрәм-шәрәм итеүселәрҙең ҡәрҙәше:

إِنَّ الْمُبَذِّرِينَ كَانُواْ إِخْوَانَ الشَّيَاطِينِ

«Малын әрәм-шәрәм итеүселәр – шайтандың ҡәрҙәше» *(Әл-Исра, 17/27)*. Әгәр кеше малын әрәм-шәрәм итә икән, был эштә уға шайтан иш булыр.

Шайтан әйберҙәрҙең исемен юрый ҡҙғәртә һәм аҙаштыра:

فَوَسْوَسَ إِلَيْهِ الشَّيْطَانُ قَالَ يَا آدَمُ هَلْ أَدُلُّكَ
عَلَى شَجَرَةِ الْخُلْدِ وَمُلْكٍ لَّا يَبْلَى

“Шайтан уны вәсвәсәгә һалды: “Йә, Әҙәм, - тине. - Һиңә мәңгелек ағасын һәм икһеҙсикһеҙ хакимлыкты күрһәтәйемме?” *(Та-ха, 20/120)*. Иблис ябай бер ағасты мәңгелек ағасы тип атаған.

وَاسْتَفْزِزْ مَنِ اسْتَطَعْتَ مِنْهُمْ بِصَوْتِكَ

“Көсөң еткәндәрҙе (аҙғын ләззәткә сақыра торған) **тауышың менән аҙҙыр”** *(Әл-Исра, 17/64).*

Шайтан Аллаһы Тәғәлә билдәләгән хәкиҡәтте йәшерергә, уны ялған менән алмаштырырға тырыша:

وَلَأُضِلَّنَّهُمْ وَلَأُمَنِّيَنَّهُمْ وَلَآمُرَنَّهُمْ فَلَيُبَتِّكُنَّ آذَانَ الْأَنْعَامِ وَلَآمُرَنَّهُمْ فَلَيُغَيِّرُنَّ خَلْقَ اللّهِ

“Уларҙы, һис шикһеҙ, тура юлдан яҙҙырырмын һәм күңелдәрендә нәфсе-хыялдар тыуҙырырмын, һәм уларға Аллаһ яралтҡанды үҙгәртергә бойорасаҡмын” *(Ән-Нисә, 4/119).*

Шайтан бөтә нәмәне лә һул ҡулы менән эшләй:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): “Һеҙҙең барығыҙ ҙа уң ҡулы менән ашаһын, уң ҡулы менән эсһен һәм әйберҙе уң ҡулы менән бирһен. Ә шайтан һул ҡулы менән ашай, һул ҡулы менән эсә, әйберҙе һул ҡулы менән ала һәм бирә”,* - тигән. *(Сахих хәҙис, Ибн Мәджә).*

Шайтан намаҙҙы йәмәғәттән айырылып яңғыҙ уҡыған кешене ыҙалата:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әгәр ауылда йәки икенсе берәй мәсеттә өс мосолман булып та, улар йәмәғәт менән намаҙ уҡырға тормаһалар, уларҙы шайтан уратып алыр. Бергә ныҡлы тотоногоҙ. Бүре лә бит көтөүенән айырылған һарыҡты ашай"*, - тигән. *(Сахих хәҙис, Әбү Дауыт).*

Шайтан намаҙ ваҡытында мосолманға бәйләнә:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *"Шайтан һеҙҙе намаҙ ваҡытында ыҙалатыр. Һәм намаҙ ҡылыусы яңылышмайынса йәки намаҙҙың нисә рәкәғәтен уҡығанын онотмайынса сигенмәй. Әгәр шулай була ҡалһа, һуңғы ултырышта әт-Тәхийәтте уҡығандан һуң ике тапҡыр сәждә итегеҙ һәм һуңынан сәләм бирегеҙ"*, - тигән. *(Сахих хәҙис, Әбү Дауыт).*

Әгәр намаҙ ҡылғандар араһында иркен аралыҡ ҡалһа, шайтан мосолмандарҙың рәтенә баҫа:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *"Намаҙ ваҡытында рәттәрҙе тығыҙлағыҙ. Фәрештәләр сафтарға теҙелгән кеүек, рәт-рәт булып торогоҙ.*

Аралыҡ ҡалдырмайынса, яурындарҙы-яурынға терәгеҙ. Шайтанға аралыҡ ҡалдырмағыҙ, шул уҡ ваҡытта үҙегеҙҙең ҡағылыуығыҙ менән ҡәрҙәштәрегеҙҙе лә ҡыҫырыҡламағыҙ. Аллаһы Тәғәлә намаҙ ҡылыусыларҙың рәтен тулыландырған кешенең етешһеҙлектәрен, гонаһтарын ҡаплай. Кем рәтте боҙа, Аллаһы Тәғәлә шуның эштәрен туҙҙырыр”, - тигән. *(Сахих хәҙис, Әбү Дауыт).*

Шайтан – насар төштәрҙең сәбәпсеһе:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *“Һеҙҙең кемегеҙ булһа ла матур төш күрһә, был төштөң Аллаһы Тәғәләнән икәнен белһен. Бының өсөн Аллаһҡа шөкөр итһен һәм уны үҙенең ябындарына һөйләһен. Әгәр насар төш күрһә, бының шайтандан икәнен белһен, һәм бер кемгә лә һөйләмәһен һәм шайтандың вәсвәсәһенән Аллаһы Тәғәләгә ныйынһын”,* - тигән. *(Бохари, Мөслим).*

Шайтан иртәнге намаҙ ҡылыуға ҡаршылыҡтар тыуҙыра:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *“Шайтан йоклап яткан кешенең башында өс төйөн бәйләй. Төнө буйы уны ошо төйөндәр менән ыҙалатып сыға. Әгәр кеше уянып, Аллаһты иҫенә төшөрһә, бер төйөн сиселер. Ә ул тәһәрәт алһа*

- икенсе төйөн сиселер. Ә ул намаҙ укыһа - һуңғы төйөн сиселер. Һәм шул осраҡта ул көндө якшы кәйеф һәм изге рух менән уҙғарыр. Кире осраҡта ялкауланып торор һәм насар кәйефтә булыр”, - тигән. *(Мөслим).*

Шайтан йәмәғәттән ҡаса:

Аллаһ Илсеһе: *“Кем ожмахҡа әләгергә ынтыла, йәмәғәттә булһын, ысынында шайтан яңғыҙ ҡалыусылар янында”,* - тигән. *(Сахих хәҙис, Тирмизи).*

Шайтан ир менән ҡатын яңғыҙ ҡалыу менән улар эргәһенә килеп етә:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *“Ир кеше ҡатын кеше янында яңғыҙ ҡалмаһын. Югиһә, уларҙың өсөнсөһө шайтан булыр”,* - тигән. *(Сахих хәҙис, Ибн Мәджә).*

Шайтан ялған һәм хата юлдан барыусылар араһында үҙенең ниәтен тормошҡа ашыра:

وَأَنَّ هَـٰذَا صِرَاطِي مُسْتَقِيمًا فَاتَّبِعُوهُ
وَلَا تَتَّبِعُواْ السُّبُلَ فَتَفَرَّقَ بِكُمْ عَن سَبِيلِهِ

“Был – Минең тура юлым: ошо юлдан барығыз, һеҙҙе Уның юлынан айырмаһындар өсөн, башҡа юлдан китмәгеҙ. Быны һеҙгә Ул васыят ҡылды – моғайын, һеҙ тәҡүәле булырһығыҙ” *(Әл-Әнғам, 6/153).*

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* был аятты аңлатыу өсөн тура һыҙыҡ һыҙған һәм былай тигән: *“Бына был туп-тура юл, Аллаһ юлы”*. Һуңынан ошо һыҙыҡтың уң һәм һул яғынан төрлө һыҙыҡтар һыҙған һәм: *“Ә былар башҡа юлдар. Һәм улар араһында башында шайтан ултырмаған һәм уның буйлап барыусыны аҙаштырмаған юл юҡтыр”*, - тип аңлаткан. Һуңынан ул ошо изге аятты уҡыған. *(Нәсаи).*

Шайтан асыуланған ваҡытта яҡын килә:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) “Мин шундай һүҙҙәр беләм, әгәр кеше күңел төшөнкөлөгөнә һәм хәлһеҙлеккә бирелгән саҡта уларҙы әйтһә, барыһы ла үтә. Был “Әғүҙү билләһи минәш-шайтанир-раджим”*, - тип әйткән. *(Бохари, Мөслим).* Аллаһтың Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* быны уның янына асыуланыуҙан йөҙө ҡыҙарған һәм муйынында ҡан тамырҙары бүртеп сыҡҡан хәлдә килгән кешегә әйткән.

“Әл-Көрси” аятын уҡыған кешегә шайтан яҡынлаша алмай:

“Әбү Хөрәйрәгә төшөндә шайтан килгән һәм: “Кем йоҡлар алдынан “Әл-Көрси” аятын уҡый, Аллаһы Тәғәлә уға һаҡсылар ҡуя һәм таң атканға тиклем шайтан уға яҡынлаша алмай”, - тигән. Әбү Хөрәйрә был турала Пәйғәмбәргә *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* әйткәс, ул: *“Алдаҡсы булһа ла, ул һиңә дөрөҫөн әйткән”*, - тигән». *(Бохари).*

Шайтан аҙан ишетеп ҡаса:

“Ысынында, намаҙға аҙан ишетелгәс, шайтан боролоп ҡаса” (Мөслим). Икенсе бер хәҙистә былай тип еткерелә: *“Намаҙ ҡылған ваҡытта әт-Тәхийәт уҡығанда һуҡ бармаҡ хәрәкәте шайтанға тимер менән һуҡканға ҡарағанда ла ныҡыраҡ беленә”. (Әхмәд).* Йәғни, һуҡ бармаҡ был ваҡытта уға тимер сыбыртҡы кеүек тәҫир итә.

Рамаҙан айында шайтанға быҡау һалына:

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *“Рамаҙан етһә, Ожмах ишектәре асыла, Тамуҡ ишектәре ябыла, һәм шайтанға быҡау һалына”*, - тип әйткән. *(Нәсаи).*

Ихлас күңелдән тәүбә итеү шайтанды

ҡоралһыҙландыра:

وَإِمَّا يَنزَغَنَّكَ مِنَ الشَّيْطَانِ نَزْغٌ فَاسْتَعِذْ بِاللّهِ
إِنَّهُ سَمِيعٌ عَلِيمٌ إِنَّ الَّذِينَ اتَّقَواْ إِذَا مَسَّهُمْ طَائِفٌ
مِّنَ الشَّيْطَانِ تَذَكَّرُواْ فَإِذَا هُم مُّبْصِرُونَ

“Әгәр шайтан тарафынан булған берәй төрлө ҡоткоға тарыһаң, Аллаһҡа һыйын. Ул ишетеп-күреп тора! Тәҡүәле кешеләргә шайтандан ҡотко ҡағылһа, улар (Аллаһты) **иҫкә төшөрә һәм бына улар** (хаҡ юлды) **күрә”** *(Әл-Әграф, 7/200-201).*

Шайтан Аллаһтың ихлас ҡолдарына зыян килтерә алмай:

“Иблис әйтте: “Раббым, мине тура юлдан яҙҙырғаныңа күрә, мин дә Ер йөҙөндәгеләргә гонаһтарын ләззәтле һәм гүзәл ғәмәл итеп күрһәтермен һәм юлдан яҙҙырырмын. Тура ҡолдарыңдан ҡалған барсаһын” *(Әл-Хиджр, 15/39-40).*

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: *“Аллаһы Тәғәлә Уның ризалығы өсөн башҡарылған ихлас ғәмәлдәрҙе генә ҡабул итә”*, - тигән. *(Нәсаи).*

Аллаһы Тәғәлә шайтанға кешеләр өҫтөнән власть биргән. Ләкин шайтандың власы үҙ динен һүҙҙә генә раҫлаған динһеҙҙәр һәм икейөҙлөләргә генә ҡағыла. Сөнки улар Аллаһы Тәғәләне һәм Аллаһ ярҙамын аңлы рәүештә кире ҡағып, шайтан ярҙамын бер һүҙһеҙ ҡабул итеп, шайтан артынан китеү менән ҡәнәғәтләнгән кешеләр. Шуны һәр саҡ хәтерҙә тотоу кәрәк: Аллаһы Тәғәләгә ынтылғандар ғына еңеүгә өлгәшә.

Ә хәҙер Аллаһы Тәғәлә Илсеһе Мөхәммәт Пәйғәмбәр *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* аша кешелеккә төшөрөлгән бөйөк мөғжизә - Изге Ҡөрьән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ:

وَقَالَ الشَّيْطَانُ لَمَّا قُضِيَ الأَمْرُ إِنَّ اللّهَ وَعَدَكُمْ
وَعْدَ الْحَقِّ وَوَعَدتُّكُمْ فَأَخْلَفْتُكُمْ وَمَا كَانَ لِيَ
عَلَيْكُم مِّن سُلْطَانٍ إِلاَّ أَن دَعَوْتُكُمْ فَاسْتَجَبْتُمْ لِي
فَلاَ تَلُومُونِي وَلُومُواْ أَنفُسَكُم مَّا أَنَاْ بِمُصْرِخِكُمْ
وَمَا أَنتُمْ بِمُصْرِخِيَّ إِنِّي كَفَرْتُ بِمَآ أَشْرَكْتُمُونِ
مِن قَبْلُ إِنَّ الظَّالِمِينَ لَهُمْ عَذَابٌ أَلِيمٌ

“Иҫәп-хисап бөткәндән һуң (иманлылар – йәннәттәргә, гонаһлылар йәһәннәмдәргә

урынлаштырылғас) **шайтан әйтер: “Һис шикһеҙ, Аллаһ һеҙгә вәғәҙә иткәнде еренә еткерҙе. Мин дә һеҙгә вәғәҙә иттем, әммә һеҙҙе алданым. Һеҙгә ярҙам итерлек көс миндә юҡ. Мин бары тик һеҙҙе Аллаһҡа ышанмаҫҡа өндәнем. Хәҙер мине түгел, үҙегеҙҙе ғәйепләгеҙ. Мин һеҙҙе ҡоткара алмайым, һеҙ ҙә мине ҡоткара алмаҫһығыҙ. Һеҙҙең мине Аллаһҡа тиңләүегеҙҙән мин ваз кисәм”, -тип әйтер. Шик юҡ, залимдар өсөн әрнеүле язалар бар”** *(Ибраһим, 14/22).*

«САД» нәшриәт төркөме
Мәскәү - 2010

ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

Мөхйиддин бин Ғәрәби

“Сәжәрәтүль-Каун” китабынан

اَعُوذُ بِاللهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ
بِسْمِ اللهِ الرَّحْمَنِ الرَّحِيمِ
اَلْحَمْدُ لِلهِ رَبِّ الْعَالَمِينَ

Аллаһыға – Ғәләмдәр батшаһына мактау!

اَللَّهُمَّ صَلِّ عَلَى سَيِّدِنَا مُحَمَّدٍ وَ اٰلِهِ وَصَحْبِهِ وَسَلِّمْ

Йә, Аллаһ! Беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә, уның ғаиләһенә һәм барлык сәхәбәләренә фатихаңды бир, сәләмлә!

❋

Муаз бин Джәбәл Ибн Ғәббәстән *(раҙыйаллаһу ғәнһүмә)* ошоларҙы ишетеүен һөйләй: “Бер көндө беҙ Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* менән ансарҙарҙың береһенең өйөндә йыйылыштыҡ… Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* сәхәбәләре менән сөхбәт (әңгәмә) уҙғарып ултыра ине. Шул ваҡыт урамдан тауыш ишетелде:

– Өй хужалары!.. Өйҙә кем бар?.. Миңә инергә рөхсәт бирәһегеҙме? Минең һеҙгә йомошом бар ине…

Бөтәһе лә Пәйғәмбәргә *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* ҡараны. Был әңгәмәлә иң төп кеше булғанға күрә, рөхсәтте ул ғына бирә ала ине.

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*:

– Был кемдең тауышы икәнен беләһегеҙме? – тип һораны.

Беҙ бөтәбеҙ ҙә:

– Аллаһы Тәғәлә һәм Уның Пәйғәмбәре *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* яҡшы беләләр, – тип яуап бирҙек.

Пәйғәмбәр *(салаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*:

– Был ҡәһәр һуҡҡан Иблис – Шайтан. Әйҙә Аллаһы Тәғәләнең ҡарғышы уның өҫтөндә булһын…

Кем килгәнен белгәс, Ғүмәр *(раҙыйаллаху ғәнһү)*:

– Йә, Аллаһ Илсеһе! Миңә уны үлтерергә рөхсәт ит! – тип ҡыскырып ебәргән.

Әммә Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* уға рөхсәт бирмәгән:

– Туҡта, Ғүмәр! Уның үлеме билдәле бер көнгә тиклем кисектереп торолғанын белмәйһеңме ни? – тигән. – Уға ишекте асығыҙ, инһен әйҙә… Уға бында килергә әмер ителгән. Уның әйткәндәрен аңларға тырышығыҙ. Иғтибар менән тыңлағыҙ…“

❋

Артабан риүәйәтсе былай тип һөйләй:

“Уға ишекте астылар. Ул өйгә инде һәм беҙҙең алдыбыҙға килеп баҫты. Был ҡылый күҙле, һаҡалһыҙ, әйәгендә тик ат ҡойроғондағы кеүек алты йәки ете бөртөк кенә һаҡалы эленеп торған, күҙҙәре шар асылған һәм өҫкә ҡараған, филдеке кеүек шул тиклем ҙур башлы, һыйырҙыҡы кеүек һалпайып төшкән муйынлы ҡарт булып сыҡты.

Ул өйҙә йыйылыусыларҙы сәләмләне:

– Сәләм һиңә, йә, Мөхәммәт; сәләм һеҙгә, йә, мосолман өммәте!

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* уға шулай яуап бирҙе:

– Сәләм Аллаһҡа бирелә, ә һин ҡәһәрле… Һин эш буйынса килгән, тип ишеттем, йомошоңдо һөйләп ебәр?

Шайтан былай тип башланы:

– Мин бында үҙ иркем менән килмәнем, мине мәжбүр итеп ебәрҙеләр.

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* унан:

– Мәжбүр итеп, тигәнде нисек аңларға? – тип һораны.

Шайтан былай тине:

– Миңә Һинең бөйөк Раббыңдан фәрештә

килде һәм былай тине: “Бөйөк Аллаһы Тәғәлә бойора: “Мөхәммәткә барып, уға нисек Әҙәм балаларын ҡыҙыктырыуың һәм алдауың тураһында һөйлә. Тик күндәм һәм тыңлаусан бул. Һуңынан уның бөтә һорауҙарына ла дөрөҫ яуап бирерһең. Бөйөк Аллаһы Тәғәлә иҫкәртте: “Әгәр һөйләгәндәреңә бер генә лә ялған һүҙ өҫтәһәң, алдаһаң, һине көлгә әйләндерәм һәм ел менән борҡотам. Дошмандарың алдында һине мәсхәрәгә ҡалдырам”.

Бына шулай, ошо бойороҡты тыңлап, йә, Мөхәммәт, мин һиңә килдем.

Нимә теләйһең, шуны һора. Әгәр ҙә һинең һорауҙарыңа ялған яуаптар бирһәм, дошмандарым мине мәсхәрә итәсәк. Ысынында, миңә дошмандарымдың көлөүенән дә яманыраҡ нәмә юҡ.

❋

Ул һөйләп бөткәс, Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*:

– Әгәр һин ысынында дөрөҫөн һөйләһәң, кешеләр араһынан нығыраҡ кемде күрәлмайһың, миңә аңлатып үт? – тип һораны.

Шайтан:

– Һине, йә, Мөхәммәт! Аллаһы Тәғәләнең

яралтҡандары араһынан һинән дә нығыраҡ күрәлмаған бер кемем юҡ… Хәйер, кем һинең менән ярыша ала һуң? – тине.

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*:

– Минән һуң кемде күрәлмайһың? – тип һораны.

Шайтан:

– Үҙен Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә бағышлаған тәкүәле үҫмерҙе, - тине.

Артабан бер-бер артлы һорауҙар һәм яуап-тар дауам итте. Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* һораны, шайтан яуап бирҙе:

– Һин тағы ла кемде яратмайһың?

–Сабырлыҡ күрһәткән һәм шиклене нәмәләрҙән ҡаскан ғалимды.

– Тағы ла?

– Нимәнелер булһа таҙартырға теләп, уны өс тапҡыр йыуған кешене.

– Ә тағы ла?

– Үҙенең фәкирлегенә түҙгән һәм быны бер кемгә лә һөйләмәгән һәм үҙ хәленә зарланмаған ярлыны…

– Ә был ярлы түҙемле икәнен ҡайҙан беләһең?

– Йә, Мөхәммәт, ул үҙе кеүектәргә үҙенең

фәкирлеге тураһында зарланмай. Әгәр кем дә булһа өс көн буйына үҙенең фәкирлеге тураһында үҙе кеүек ярлыға һөйләй икән, Аллаһы Тәғәлә уны сабырлыҡ күрһәткәндәр рәтенә индермәйәсәк. Сабыр итеүселәр улай итмәй. Асылда, кешенең үҙен тотошонан, ғәмәлдәренән һәм зарынан мин уның сабырмы, юҡмы икәнлеген беләм.

– Ә тағы ла кемде күрәлмайһың?

– Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән байҙы.

– Ә һин уның яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгәнен ҡайҙан беләһең?

– Әгәр ҙә мин уның табышты хәләл юл менән тапҡанын һәм уны рөхсәт ителгәнгә тотонғанын күрһәм, уның яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгәнлеген беләм.

❋

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* һөйләшеүҙе икенсе йүнәлешкә бороп, былай тип һораны:

– Минең өммәтем намаҙға торғанда һинең менән нимә була?

– Йә, Мөхәммәт, минең бөтә тәнем ҡалтырана.

– Ниңә улай һуң, ҡәһәрләнгән?

– Ҡол баш эйеп, сәждә ҡылыуҙан Аллаһ ҡаршыһында бер кимәлгә юғары күтәрелә.

– Ә улар ураҙа тоҡланда һин үҙеңде нисек тояһың?

– Быҡауланған килеш улар ауыҙ асҡанға тиклем хәрәкәтһеҙ ҡалам.

– Ә улар хажға барғанда һин үҙеңде нисек тояһың?

– Был ваҡытта мин аҡылымдан яҙам.

– Ә улар Ҡөрьән уҡыған ваҡытта һиңә нисек?

– Ул ваҡытта мин ҡурғаш ут ялҡынында ирегән кеүек ирейем.

– Ә улар саҙаҡа биргән ваҡытта һин үҙеңде нисек тояһың?

– Эйе, ул ваҡытта минең хәлем ныҡ ауыр була. Гүйә, саҙаҡа биргән кеше ҡулына быҫҡы тотоп, мине икегә быса.

Мөхәммәт Пәйғәмбәр *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* бының сәбәбе тураһында һорашты:

– Ә ниңә һин икегә бүленәһең?

Иблис:

– Быныһын да аңлатам. Саҙаҡаның дүрт өҫтөн сифаты бар:

1. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биргән кешене таҙарта һәм фатихаһын бирә.

2. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биреүсегә ҡарата кешеләрҙә һөйөү уята.

3. Аллаһы Тәғәлә тамуҡ менән саҙаҡа биреүсе кеше араһына саҙаҡанан кәртә ҡуя.

4. Аллаһы Тәғәлә саҙаҡа биреүсе кешегә бәлә, бәхетһеҙлек һәм ауырыуҙар ебәрмәй.

❋

Һуңынан Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* уға үҙенең сәхәбәләре хаҡында бер нисә һорау бирҙе:

– Әбү Бәкер хаҡында нимә әйтерһең?

Иблис:

– Ул минең артымдан хатта йәһилиәт ваҡытында ла эйәрмәне… Ә мосолман булғас, миңә буйһона буламы һуң инде?

– Ярар, ә Ғүмәр бин Хаттаб тураһында ни әйтерһең?

– Аллаһ менән ант итәм: ҡайҙа ғына күрһәм дә, мин унан ҡасам.

– Ә Ғосман бин Аффан хаҡында ни әйтерһең?

– Мин унан оялам… Ныҡ оялам… Шулай булмай ней, Аллаһтың фәрештәләре лә унан ояла бит.

– Яҡшы. Ә Ғәли бин Әбү Талиб хаҡында ни әйтерһең?

Уның тураһында Иблис былай тине:

– Эх, әгәр ҙә мин уның ҡулдарынан ҡотола алһам… Эх, әгәр ҙә ул яңғыҙ ҡалһа, мин дә яңғыҙ ҡалыр инем… Әгәр ул миңә бәйләнмәһә, мин дә уны тыныслыҡта ҡалдырыр инем…

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм),* шайтандан үҙенең һорауҙарына яуап алып бөткәс, былай тине:

– Минең өммәтемде бәхетле иткән һәм билдәләнгән ваҡытҡа тиклем һине һынау итеп ебәргән өсөн Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар булһын!

Ҡәһәрләнгән Иблис, Аллаһ Илсеһенең *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* был һүҙҙәрен ишетеп, ҡыҫҡырып ебәрҙе:

– Юҡ инде, юҡ! Һинең өммәтең өсөн бәхет ҡайҙа? Мин тере саҡта һәм билдәләнгән ваҡытҡа тиклем йәшәгәндә һин нисек үҙеңдең өммәтең өсөн тыныс була алаһың? Мин бит уларҙың ҡан тамырҙарына тиклем үтеп инәсәкмен. Әммә улар бит быны күрмәйәсәк тә, белмәйәсәк тә.

Мине яралтҡан һәм Ҡиәмәт көнөнә тиклем миңә ваҡыт биргән Аллаһ менән ант итәм, мин уларҙың бөтәһен дә аҙҙырасаҡмын.

Наҙандарын да, ғалимдарын да… Ғилемлеләрен дә, ғилемһеҙҙәрен дә… Гонаһлыларын да, тәкүәлеләрен дә… Асылда, уларҙың бер кеме лә минең ҡулымдан ысҡына алмаҫ. Шулай ҙа… Аллаһтың ихлас ҡолдарынан башҡалары… Эйе, мин уларҙы юлдан яҙҙыра алмайым.

Аллаһ илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*:

– Һинеңсә, Аллаһы Тәғәләнең ихлас ҡолдары кемдәр? – тип һораны.

Иблис былай тип яуап бирҙе:

– Белмәйһеңме ни? Йә, Мөхәммәт, дирһәм, динар яратыусылар бар… Улар Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында ихлас түгел.

Икеселәре, аҡсаға ҡыҙыҡмаған, мактанырға һәм үҙен мактағандарын яратмағандар бар… Мин уларҙың ихлас икәндәрен беләм. Мин уларҙы шунда уҡ ташлайым һәм ҡасам.

Байлыҡты һәм ярамһыҡланыуҙы яратҡан, йөрәктәре ер теләктәре менән тулған кешеләр – минең иң тоғро кешеләрем, мин уларҙы алдап, үҙемә ҡараттым.

Байлыҡты һөйөү – иң ҙур гонаһтарҙың береһе икәнде һин белмәйһеңме ни?

Етәкселеккә ҡомһоҙланып ынтылыу – иң ҙур гонаһтарҙың береһе икәнде һин белмәйһеңме ни?

Иблис һөйләүен дауам итте:

– Йә, Мөхәммәт, һин белмәйһеңме ни? Минең етмеш мең балам бар. Мин уларҙың һәр береһен һәр өлкәгә һаҡсы итеп ҡуйҙым.

Ә минең һәр баламдың етмеш мең шайтаны бар.

Уларҙың бер өлөшөн мин ғалимдарға ебәрҙем.

Ә бер өлөшөн йәштәргә, бер өлөшөн – ҡарттарға, бер өлөшөн – оло ҡатындарға ебәрҙем.

Йәштәргә килгәндә, беҙҙең арала аңлашылмаусанлыҡтар юҡ. Улар менән беҙ тиҙ уртаҡ тел табабыҙ.

Балаларға килгәндә… Улар ҙа беҙҙең балалар кеүек үк уйнай. Ә беҙҙең балаларҙың бер өлөшөнә мин тәҡүәле кешеләрҙең балаларына ауырыу йоҡторорға ҡуштым, ә бер өлөшөн гонаһлыларҙың балаларына ебәрҙем.

Шайтандар кешегә килә, уны бер хәлдән икенсе хәлгә этә, бер сиктән икенсе сиккә ташлай. Һәм уларҙы шул хәлгә тиклем еткерә: улар әрләшә һәм бер-береһенә бер ниндәй сәбәпһеҙ ташлана башлай… Әммә үҙҙәренең был хәлен улар үҙҙәре лә төшөнә алмай.

Һуңынан Иблис нисек бер монахты алдағанын

һөйләне:

– Йә, Мөхәммәт, һинең Барсис исемле монах тураһында ишеткәнең юкмы ни? Ул етмеш йыл буйына Аллаһы Тәғәләгә ихлас ғибәҙәт иткән. Үҙенең ғибәҙәте арҡаһында ул шундай кимәлгә лайыҡ булған: уның ауырыуҙарға теләгән һәр доғаһы Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡабул булған һәм улар йүнәлеп киткән.

Мин уны бер генә минутҡа ла яңғыҙ ҡалдырмай, күҙәтә башланым… Һәм бына ул зина ҡылды. Һуңынан – кеше үлтерҙе. Һәм, ниһайәт, имандан тайпылды.

Ул Аллаһы Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә әйткән кешеләр араһынан:

كَمَثَلِ الشَّيْطَانِ إِذْ قَالَ لِلْإِنسَانِ اكْفُرْ فَلَمَّا كَفَرَ
قَالَ إِنِّي بَرِيءٌ مِّنكَ إِنِّي أَخَافُ اللَّهَ رَبَّ الْعَالَمِينَ

“Монафиктарҙың хәле иһә шайтандың хәле кеүек. Шайтан кешегә: “Инҡар ит!” – тине. Кеше инҡар иткәс: “Мин һеҙҙән йыраҡ торам, сөнки мин ғаләмдәрҙең Раббыһы булған Аллаһтан ҡурҡам, – ти”, *(«әл-Хәшр», 59/16).*

❋

Һуңынан Иблис кешенең насар сифатта-

ры тураһында һөйләне һәм уларҙы нисек ҡулланыуы тураһында аңлатты.

Алдашыу:

– Йә, Мөхәммәт, алдашыу минән икәнде белмәйһеңме ни? Һәр ялған һөйләүсе – минең әшнәм.

Алдап вәғәҙәләр биргән һәр кемде мин шул тиклем яратам.

Мин нисек Аллаһ исеме менән ант итә-итә Әҙәм менән Һауаны алданым, иҫләмәйһеңме ни?

وَقَاسَمَهُمَا إِنِّي لَكُمَا لَمِنَ النَّاصِحِينَ

“Һәм уларға: “Мин һеҙгә яҡшы нәсихәт биреүселер”, – тип ант итте” *(Әл-Әғрәф, 7/21).*

Ялған вәғәҙәләр – минең күңел байрамы.

Ғәйбәт һәм фетнә:

– Ә кешенең үҙе булмағанда уның тураһында насар һөйләүгә (ғәйбәт) һәм улар араһында ыҙғыш һәм талаш таратыуға (фетнә) килгәндә, былар – минең эшемдең емештәре. Уларҙың был гонаһҡа төшкән ваҡыты – минең өсөн оло байрам.

“Айырылышам” тип ант итеү:

– Шаяртып булһа ла “айырылышам” тип

әйткән һәр кем гонаһҡа төшә. Хатта бер генә тапҡыр, хатта рөхсәт ителгән эш өсөн әйтһә лә.

“Талаҡ” һүҙе менән айырылышыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан һәр кемгә, дөрөҫлөк иҫбат ителмәйенсә тороп, ҡатынына барыу рөхсәт ителмәй. Әгәр ҙә шундай мөнәсәбәттәрҙә уларҙың балалары тыуһа, улар зинанан тыуған, тип иҫәпләнә. Шундай эштәрҙе эшләгән кешеләр тамуҡҡа эләгә.

Намаҙ:

– Йә, Мөхәммәт! Намаҙ уҡыусыларға нимә эшләүем хаҡында һөйләргә ваҡыт етте.

Әгәр ҙә кемдер намаҙ уҡырға йыйынһа, мин уны тоткарлайым. Уға вәсвәсә бирәм. Уға: “Ваҡыт әле бар. Өҫтәүенә, һинең эшең күп. Әлегә эшеңде бөтөрә тор. Намаҙҙы һуңынан да уҡып өлгөрөрһөң”, - тип әйтәм.

Шулай итеп, ул намаҙҙы һуңлатып уҡый. Шул сәбәпле уға намаҙы кире ҡайтарыла.

Әгәр ҙә ул мине еңеп сыҡһа… Мин уға кешеләр араһынан шайтан ебәрәм. Һәм ул намаҙ ваҡытын үткәреп ебәргәнсе уның иғтибарын икенсе яҡҡа йүнәлтеп, намаҙын онотторасаҡ.

Әгәр ҙә ул был осраҡта ла мине еңһә… Мин уны намаҙ ваҡытында бүлдерергә тырыша башлайым. Уға: “Уңға ҡара, һулға ҡара”, – тип әйтәм. Һәм ул тирә-яғына ҡарана башлаясаҡ.

Шул вақыт мин уның маңлайынан үбәм дә әйтәм: “Быны һин кәрәкмәгән нәмәне эшләнең дә инде”.

Шулай итеп уның кәйефен боҙам.

Һин бит беләһең, йә, Мөхәммәт, Аллаһы Тәғәлә тирә-яғына ҡаранып торған кешенең намаҙын ҡабул итмәй.

Әгәр ҙә был осраҡта ла ул минән өҫтән сығҡа, мин уға намаҙын яңғыҙ ҡылған вақытта киләм һәм: “Намаҙыңды тиҙерәк ҡыл”, – тип әйтәм. Һәм ул намаҙын ҡабаланып уҡый башлай. Хас та ем сүпләгән әтәс кеүек…

Әгәр ҙә был осраҡта ла уны еңә алмаһам, уға ул намаҙын йәмәғәт менән уҡыған саҡта киләсәкмен. Уның башын ауыҙлығтар менән сырмайым… Уны руҡуғтан һәм сәждәнән һуң имамдан алда баш күтәрергә мәжбүр итәм…

Ошо ҡылығы өсөн Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәлә уның башын ишәктекенә әйләндерәсәк.

Ләкин был осраҡта ла ул миңә эйәрмәһә, мин уға бармаҡтарың менән уйна, тип вәсвәсә бирәм. Намаҙ вақытында ул быны эшләй башлаһа, мин маҡталған эш эшләнем булыр.

Әгәр ҙә уға көсөм етмәһә, яңынан барам да уның танау тишегенә өрәм. Минең һулышымдан ул иҫнәй башлай.

Ул ауыҙын ҡулы менән ҡапламайынса

иçнәй башлаһа, уның эсенә ерҙәге ләззәттәргә, байлыҡтарға ынтылышын арттырған бәләкәй шайтан инеп китер.

Шул ваҡытта был кеше беҙгә генә буйһонасаҡ. Беҙҙең бойороҡтарҙы тыңлаясаҡ. Беҙ ниндәй әмер бирәбеҙ, шуны ғына үтәй башлаясаҡ.

❋

Шайтан һөйләүен дауам итте:

– Һин нисек өммәтең именлектә буласаҡ, тип өмөт итә алаһың? Эх, мин уларға ниндәй генә тоҙаҡтар әҙерләмәнем… Шундай ҡапҡандар…

Ярлыларға, йәберһетелгәндәргә, өмөтһөҙлөккә төшкәндәргә киләм дә: “Намаҙ һеҙҙең кеүектәргә мотлаҡ түгел, Аллаһ уны кем һау һәм бай – шуларға тәғәйенләгән”, - тим.

Шунан ауырыу янына киләм һәм уға ла шыбырлайым: “Намаҙ һиңә мотлаҡ түгел. Аллаһы Тәғәлә бит шулай бойорған:

لَيْسَ عَلَى الْأَعْمَى حَرَجٌ وَلَا عَلَى الْأَعْرَجِ حَرَجٌ
وَلَا عَلَى الْمَرِيضِ حَرَجٌ

“Һуҡыр, аҡһаҡ, ауырыу кешеләргә гонаһ юҡ” *(Ән-Нур, 24/61).*

Һауыҡҡас, намаҙ ҡылыуыңды дауам итерһең...»

Шулай итеп, улар намаҙ ҡылыуҙан туҡтайҙар, ә ҡайһы берәүҙәре имандан бөтөнләй ситләшә.

Ә ауырыу килеш кеше намаҙ уҡыуҙан туҡтаһа һәм үлеп ҡалһа... Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһына барып баҫҡанда ул үҙендә Уның асыуын тойор.

Артабан шайтан:

Йә, Мөхәммәт! Әгәр мин үҙемдең һөйләгәндәремдә саҡ ҡына булһа ла ялған өҫтәһәм, мине саян саҡһын. Эйе, әгәр мин алдаһам, Аллаһтан мине көлгә әйләндереүен һора, - тип ант итте.

Йә, Мөхәммәт! Нисек инде һин үҙеңдең өммәтең өсөн тыныс була алаһың? Мин бит һинең өммәтеңдәге һәр алтынсы кешене диндән тайпылырға мәжбүр иттем!

❋

Артабан Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* Иблиска бер нисә ҡыҫҡа һорауҙар бирҙе.

- Һинең әшнәң кем?

- Проценттар иҫәбенә йәшәүсе.

- Һинең дуҫың кем?

- Зина ҡылыусы.

- Һин кем түшәгендә йоҡлайһың?

- Эскесе ҡатын түшәгендә.

- Ә кемде ҡунаҡҡа алып йөрөйһөң?

- Бурҙы.

- Ә һинең вәкилдәрең кемдәр?

- Сихырсылар.

- Һин бигерәк тә ниҙе яратаһың?

- Ир менән ҡатындың айырылышыуын.

- Кемде нығыраҡ яратаһың?

- Йома намаҙын уҡыуҙан баш тартыусыларҙы.

❋

Һуңынан Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* башҡа темалар буйынса ла һорауҙар бирҙе:

- Эй, ҡәһәрләнгән, һинең кәйефеңде нимә төшөрә?

- Изге яуға китеүсе һуғыш аттарының кешнәүе.

- Ә һинең тәнеңде нимә иретә?

- Гонаһтары өсөн тәүбә итеүсе.

- Ә нимә һинең бауырыңды өҙгөсләй?

- Аллаһы Тәғәлә алдында көнө-төнө ҡылынған тәүбәләр.

- Һинең йөҙөңдө нимә ҡыйшайта?

- Йәшереп бирелгән саҙаҡа.

- Һинең күҙҙәреңдә нимә һуҡырайта?

- Төндә ҡылынған намаҙ.

- Ә башыңды түбән эйергә нимә мәжбүр итә?

- Йәмәғәт менән ҡылынған күп намаҙҙар.

❋

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* тағы һорауҙар бирҙе:

- Һинеңсә, кем ул иң бәхетле кеше?

- Аңлы рәүештә намаҙ ҡылыуҙан туҡтаған кеше.

- Кем һине башҡаларҙан нығыраҡ бөлдөрә?

- Һаҡсыл кешеләр.

- Ә нимә һине эшеңдән бүлдерә?

- Ғалимдарҙың йыйылышы.

- Әйт әле, һин нисек ашайһың?

- Аҙыҡты бармаҡ остары менән тотоп, һул ҡул менән ашайым.

- Ә ҡайнар ел иҫһә һәм эҫе булғанда һин үҙеңдең нәҫеленде ҡайҙа йәшерәһең?

- Кешеләрҙең тырнаҡ аҫтына.

❋

Артабан Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* икенсе темаға күсте. Иблис яуап биреүен дауам итте.

- Һин үҙеңдең Раббыңдан нимә һораның?

- Ун әйбер һораным.

- Ниндәй?

- Бына шундай:

1) Мин Раббымдан, Ул миңә кешеләр менән уларҙың малын һәм балаларын бүлеүҙе һораным... Минең был һорауым ҡәнәғәтләндерелде. Һәм был изге аят менән иҫбат ителде:

وَشَارِكْهُمْ فِي الأَمْوَالِ وَالأَوْلادِ وَعِدْهُمْ

“Хәлеңдән килгәнсә уларҙы тауышың менән әүрәт, байлығын, балаларын бергә файҙалан” *(Әл-Исра, 17/64).*

Мин Аллаһ исеме (бисмилләһ) менән һуйылмаған малдарҙың ите һәм процентынан килем килгән һәм тыйылған ризыҡтар менән тукланам.

Һәм мин шулар менән бергә, алған саҡта Аллаһы Тәғәләгә һыйынмаған (Әғүҙүне

әйтмәгән) мөлкәттәр менән файҙаланам

Ә енси яҡынлыҡ ҡылған ваҡытта кем дә булһа Аллаһ һаҡлауына таянмай икән, мин уның ҡатыны менән мөнәсәбәткә инәм... Ә был яҡынлыҡтан тыуған бала беҙҙе тыңлаясаҡ һәм минең бойороғомды үтәйәсәк.

Әгәр кемдер яҡшы ниәт менән түгел, ә гонаһлы ниәт менән һыбай атланһа, мин уның эргәһенә ултырам. Һәм мин уның юлдашы һәм һыбай йөрөгәнендә күршеһе буласаҡмын.

Һәм был аят менән раҫланды. Аллаһ миңә бойорҙо:

وَأَجْلِبْ عَلَيْهِم بِخَيْلِكَ وَرَجِلِكَ

“Хәленән килгәнсә уларға ҡаршы атлы-йәйәүле ғәскәрҙәр йый!” *(Әл-Исра, 17/64).*

2) Мин Аллаһы Тәғәләнән: “Миңә йәшәү урыны бир” тинем. Ул миңә мунсаны тәғәйенләне.

3) Мин унан миңә ғибәҙәт итеү урындары биреүен һораным... Һәм ул һәр баҙарҙа миңә мәсет урындары бирҙе.

4) Уҡыу өсөн китап һораным... Ул миңә шиғырҙар бирҙе.

5) Миңә аҙан бир, тинем... Ул миңә йыр бирҙе.

6) Мин унан: “Йоҡлағанда иптәш бир”, - ти-

нем... Ул миңә эскеселәрҙе бирҙе.

7) Мин унан ярҙамсылар һораным, ул миңә кадариттар сектаһын бирҙе.

8) Мин унан ҡәрҙәштәр һораным, ул миңә үҙенең мөлкәтен исраф итеүселәрҙе һәм үҙенең килемен гонаһлы эштәргә тотоноусыларҙы бирҙе. Һәм был аят менән раҫланды:

إِنَّ الْمُبَذِّرِينَ كَانُواْ إِخْوَانَ الشَّيَاطِينِ

“Исраф иткән – шайтан туғаны” *(Әл-Исра, 17/27).*

Шул урында Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)*: “Әгәр һин аяттар менән иҫбат итмәһең, мин һиңә ышанмаҫ инем”, - тине.

Иблис былай тип дауам итте:

9) Йә, Мөхәммәт! Аллаһы Тәғәләнән мин кешеләрҙе күрә алыуымды, ә уларҙың мине күрмәүен һораным. Минең был теләгем үтәлде.

10) Мин кешеләрҙең ҡан тамыры миңә асыҡ булыуын һораным. Был теләгем дә үтәлде. Һәм хәҙер мин ҡайҙа һәм ҡасан теләйем, уларҙың тәндәре буйынса йөҙәм...

Шулай итеп, минең бөтә теләктәрем дә үтәлде.

“Һәм һиңә бөтәһе лә биреллде” – тип бойорҙо Раббым... Һәм мин үҙемдең был хәлем менән

бик ғорурланам.

Тағы ла... Шуны өҫтәргә теләйем: һинең артыңдан эйәреүселәргә ҡарағанда, минең артымдан эйәреүселәр күпкә күберәк.

Бына шулай... Ҡиәмәт көнөнә тиклем кешелектең күп өлөшө минең артымдан эйәрәсәк.

Һуңынан Иблис бына нимә тураһында һөйләне:

- Минең Атема исемле улым бар. Әгәр берәй кеше намаҙ ҡылмайынса йоҡларға ятһа... ул уның ҡолағына барып, эшен бөтөрәсәк... Әгәр улар быны белһә, намаҙ ҡылмайынса йоҡларға ятмаҫ ине.

Тағы ла минең Мутакази исемле улым бар... Уның вазифаһы – йәшерен эшләнгән яҡшы эштәрҙе асып күрһәтеү. Мәҫәлән, әгәр бер ҡол йәшерен рәүештә яҡшы эш эшләһә һәм быны кешеләр алдында асырға теләмәһә... Мутакази уның эштәрен кешеләргә еткерергә һәм был турала хәбәр таралыуына булышлыҡ итәсәк.

Һөҙөмтәлә Аллаһы Тәғәлә ҡолона эшләнгән эше өсөн бер генә әжерен бирәсәк, ә туҡһан туғыҙы иҫәпкә алынмаясаҡ, сөнки күрһәтмәй эшләнгән изге эштәргә генә йөҙ сауап яҙыла.

Минең Кухайл исемле тағы бер улым бар.

Уның вазифаһы - кешеләрҙең күҙҙәрен томалау, бигерәк тә ғалимдарҙың йыйылышында һәм вәғәздәр (хөтбәләр) ваҡытында. Уға тик кемдеңдер күҙҙәренә ҡағылыу ғына етә, теге ҡалтырана башлай. Ул кеше артабан ғалимдың һүҙҙәрен тыңламаясаҡ һәм үҙенең изге йыйылышҡа килеү сауабынан мәхрүм ҡаласаҡ.

Артабан Иблис шулай тине:

- Ниндәй ҙә булһа ла ҡатын... ултырған урынынан торһа, уның урынына шайтан ултыра.

Тағы ла... Һәр ҡатындың күкрәгендә шайтан ултыра. Һәм ҡатынға ҡараусылар булғанда ул уны биҙәп күрһәтәсәк. Һуңынан ҡатынға, мәҫәлән, "Ҡулыңды асып күрһәт", тигәнерәк һүҙҙәр шыбырлай башлаясаҡ. Шыбырлау теге ҡатын үтәрлек итеп башҡарыла һәм ул ҡулын асып күрһәтә. Ә артабан шайтан үҙенең тырнаҡтары менән уның оялыу һәм ғиффәтлек пәрҙәһен йыртып ташлаясаҡ...

Һүҙ аҙағында Иблис Аллаһ Пәйғәмбәренә *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* үҙенең хәлен һөйләне:

- Йә, Мөхәммәт, кемделер тура юлдан тайпылдырыр өсөн минең бер ниндәй ҙә мөмкинлегем юҡ. Мин тик ҡайһы бер нәмәләрҙе матур итеп кенә күрһәтәм генә... Шул ғына...

Әгәр минең ундай мөмкинлегем булһа, мин "Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт

(саллаллаһу гәләйһи үә сәлләм) уның Пәйғәмбәре" тип әйткән, ураҙа тоткан, намаҙ уҡыған һәр кешене иманһыҙлыҡҡа төшөрөр инем.

Шулай уҡ, йә, Мөхәммәт, кешеләрҙең хаҡ юлдан барыуы һинән дә тормай. Һин тик Аллаһтың Илсеһе генә. Һәм һинең вазифаң - кешеләрҙе Исламға өндәү.

Әгәр кешеләрҙе иманға килтереү һинең ҡулында булһа, ер йөҙөндә бер ҡафыр ҙа (инанмаусы) ҡалмаҫ ине.

Һин – әгәр кеше гонаһ ҡылһа, уға ҡаршы дәлил. Ә мин – намыҫһыҙлыҡ таратыусы кешеләргә сәбәп.

Иманлы кеше әсәһенең ҡарынында уҡ – иманлы. Енәйәтсе әсәһенең ҡарынында уҡ - енәйәтсе.

Тик Аллаһы Тәғәлә генә кемдәр бәхеткә эйә икәнен билдәләй... Һәм тик Ул кемдәр енәйәтсе булырын билдәләй.

Аллаһ Илсеһе *(саллаллаһу гәләйһи үә сәлләм)*:

وَلاَ يَزَالُونَ مُخْتَلِفِينَ إِلاَّ مَن رَّحِمَ رَبُّكَ

"Ә улар ҡаршылашыуҙан туҡтамай. Раббының рәхимлек күрһәткәндәренән башҡаһы" *(Һуд, 11/119),*

وَكَانَ أَمْرُ اللَّهِ قَدَرًا مَّقْدُورًا

“Аллаһтың әмере алдан яҙған яҙмыш булды” *(Әл-Әһзәб, 33/38).*

Артабан Пәйғәмбәр *(саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)* Иблискә мөрәжәғәт итте:

- Эй, Абу Мурра! Ысынлап та, һинең тәүбә итеүең һәм Аллаһы Тәғәләгә ҡайтыуың мөмкин түгелме? Мин һинең ожмахҡа инеүеңде һораясаҡмын... Һүҙ бирәм...

Быға Иблис:

-Йә, Аллаһ Илсеһе! Бөтәһе лә бирелгән әмер буйынса башҡарылды. Хәҙер инде был әмер яҙылған яҙыу ҡараһы бөткән инде... Ҡиәмәт көнөндә нимә булырға тейеш булған, шул буласаҡ.

Һине пәйғәмбәрҙәрҙең иң бөйөгө итеп яралтыусы, һине ожмахҡа инеүселәрҙе дингә өндәүсе итеп тәғәйенләүсе һәм һине иң һөйөклө итеүсе; һәм мине – бөтә енәйәтселәрҙең һәм тамуҡ әһелдәренең башлығы итеүсе – ул Аллаһ. Һәм Ул бөтә нәмәнән дә өҫтөн.

Иблис үҙенең һөйләүен былай тип тамамланы:

- Бына шулай. Ошоноң менән бөтөрәм... Һиңә һөйләгәндәремдә мин тамсы ла алдашманым”.

Әл-Әүүәлү, Әл-Әхиру, Әз-Захиру, Әл-Батыну булған Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙар булһын!

Беҙҙең Мөхәммәт Пәйғәмбәребеҙгә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), уның яҡындарына һәм сәхәбәләренә (раҙийаллаху ғәнһүм) сәләм булһын! Амин!

Аллаһы Тәғәләнең бөтә бәйғәмбәрҙәренә һәм илселәренә (ғәләйһимуссәләм) сәләм булһын!

Әлхәмду лилләһи раббил-ғәләмин!..

Мөхйиддин бин Ғәрәби

“Сәжәрәтүль-Каун” китабынан
ШАЙТАН ХӘЙЛӘЛӘРЕ

Перевод Гульназира Айытбаева
Литературный редактор Гульфия Янбаева
Канонический редактор Айдар Хабибуллин

«Исповедь сатаны»
Перевод с русского языка на башкирский

ISBN 978-5-91811-004-1

Отпечатано в ООО «Принт Экспресс»
105066, г. Москва, Денисовский переулок, 30
Тираж: 5.000 экземпляров.

Имеются в продаже

1 - Рассказы из Корана
2 - Основы Исламских Знаний
3 - Рамадан и Пост
4 - Ислам Вера Поклонение
5 - Рассказы из уст нашего Пророка
6 - История Пророков 1 - 2 - 3 - 4 - 5
7 - Последний Вздох
8 - На пике цивилизаций
9 - Мусульманский Календарь
10 - Совершай Хадж
11 - 40 хадисов в рассказах для детей
12 - Исламское Вероучение (Акыда)
13 - Земная жизнь и ее блага в свете Ислама
14 - Несравненная личность Мухаммад Мустафа (сас)
15 - Мои первые шаги по пути истины
16 - Женщина в Исламе
17 - Беседы и наставления
18 - Беседы с духовным наставником
19 - Дуа и Суры
20 - Учусь тахарату и намазу
21 - 52 Пятничные Проповеди
22 - Тасаввуф и Тарикаты
23 - Учусь читать Коран
24 - Курбан
25 - Медицина Пророка
26 - Лучший Пример 1 - 2 - 3
27 - 76 Больших грехов
28 - Пищевые Добавки
29 - Аудио CD - Расточительство
30 - Хадж и Умра
31 - 250 Хадисов с комментариями
32 - 40 Священных Хадисов
33 - Повседневная жизнь Пророка Мухаммада. (сас)
34 - Семейная Педагогика в Исламе

Книги и журналы можно заказать:

Тел / Факс: 8 (499) 9066717 - 8 (495) 7074666, 8 (905) 7347083
www.sadpress.com / izdatelstvo-sad@yandex.ru

Новинка!

Книги и журналы можно заказать:

Почтовый адрес: 125412 г. Москва, а/я 28
Офис: г. Москва, м. Петровско-Разумовская, ул. Ангарская, 21
Тел / Факс: 8 (499) 9066717 - 8 (495) 7074666, 8 (964) 7818321
www.sadpress.com - izdatelstvo-sad@yandex.ru

Вы можете заказать бесплатный каталог Издательства.

Наши книги и журнал «Золотой Родник» Вы можете приобрести, обратившись в офис, к региональным представителям, и в магазинах, продающих исламскую литературу. Вы можете заказать их наложенным платежом, позвонив по телефону, отправив заявку по почте, SMS или Интернету.

Издательская группа САД